МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

***Фольклор байрамы:***

# "Ҡар һыгуына барыгу"

## *“Ҡар һыуына барыу” фольклор байрамы.*

### *Икенсе кескәйҙәр төркөмө.*

**Маҡсат:**

- Балаларҙа башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре,йолалары менән таныштырыуҙы дауам итеү,белемдәрен киңәйтеү.Башҡорт халҡының тәбиғәт менән айырылғыһыҙ икәнен аңлатыу
- Фольклор аша һиҙгерлек,түҙемлелек,етеҙлек,сәхнә түрендә һәр баланың үҙен дөрөҫ тотошон,телмәрҙәрен үҫтереү
- Балаларға тәбиғәткә,үҙ халҡына,ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡарата һөйөү уятыу.

**Йыһазландырыу:**

Байрам барышында ҡулланыу өсөн ҡорамал:

**Байрам барышы.**

**Ҡыҙ:** Әсәй,мин дуҫтарым менән өйҙә уйнайыммы?

**Килен**:Уйнағыҙ,дуҫтар менән татыу уйнау ул,бик яҡшы.

**Ҡыҙ:** Хәҙер мин саҡырам!

*(Ҡыҙ иптәштәре менән килеп инәләр ҙә балаҫ ситләп ултыралар.Шул ук ваҡытта һаулыҡ һорашалар)*

**Ҡыҙ:** Әйҙә уйнап алайыҡ,кем һынашмаҡ бела?

**Бала:** Мин һанайым.

Анатыр,мынатыр

Тау яғынан таң атыр

Сәүкә,сыпсыҡ

Һин ҡал,был сыҡ.

*(Сыҡҡан бала күҙен йомоп уртаға ултыра ла “Шыу-шыу-шыуҙырма”уйынын уйнай башлайҙар)*

Шыу-шыу-шыуҙырма

Сабатамды туҙҙырма

Матур яулығың һирәк

Таба алһаң һин зирәк.

*(Кемдә кульяулык туктай,шул артына кульяулыкты*

*Йәшерә,урталағы бала дөрөҫ әйтә алмаһа,яза бирелә.Бер нисә мәртәбә уйнағас,бер бала әйтә)*

**Бала:**Яза бирәбеҙ,йырлаһын “Йомроҡай”йырын

**Йыр “Йомроҡай”**

**Шиғыр һөйләй.**

**Айғына бейей.**

*Өләсәй килеп инә.Ейән менән ейәнсәре йүгереп барып ҡосаҡлап алалар.Урын күрһәтәләр.*

**Өләсәй:**Һаумыһығыҙ балаларым,ҡолонсаҡтарым.Һағындым үҙегеҙҙе.

**Балалар**:һаумыһығыҙ өләсәй.Әйҙә түрҙән уҙығыҙ*(ултырталар)*

**Өләсәй**: Йә балалар,оло байрамға – Яҙһылыу байрамына йыйылғанһығыҙ икән.Аллаға шөкөр,көндәребеҙ матур тора.*(доға кылып алғас)* Уландарым!Кем доға уҡып ебәрә.*(Бер бала укый)*

**Өләсәй**:Көндәр һәйбәт торғас,килен ҡар һыуына барып ҡайтайыҡмы әллә?

**Килен**: Балалар,әйҙәгеҙ ҡар һыуҙары тураһында шиғыр һөйләп үтегеҙ.

**Бала:** Өләсәй хәҙер һөйләйбеҙ.

**Бала:**Ағалар ҡар һыуҙары
Баҫалар баҫыуҙарҙы
Йылғалар аша ярҙан
Күләүек ҡала ҡарҙан.

**Бала**:Ҡарҙар иреп бөткәнсе
Йәйге һтллек еткәнсе
Яҙғы ташҡын үткәнсе
Ҡар һыуына барайыҡ.

**Бала**:Үңдырырмы игенде?
Туйҙырырмы илемде
Ямғыр булып яуырмы
Әллә ярып еремде

Шифа булып һеңмәйенсә

Күк томандай осормо?

**Бала:** Үҫемлеккә тәм биреп

Үләндәргә йәм биреп

Ер-әсәгә һеңерме?

Барлыҡ булған көс - ҡеүәтен

Тамырҙарға бирерме?

**Өләсәй:** Бик матур һөйләнегеҙ, рәхмәт.Ауыҙығыҙға бал да май.имен-аман ҡар һыуы алып ҡайтып самауыр ҡуяйыҡ,яҙ ҡоймағы ҡояйыҡ.табындарға ҡуяйыҡ.

**Бала:** Өләсәй һөйлә әле. Ни өсөн ҡар һыуына барғандар?Ҡайҙан килеп сыҡҡан ул йола?

**Өләсәй**: Борон-борондан беҙҙең ырыу башҡорттары араһында тауға,ҡар һыуына барыу йолаһы булған.Һыуға яҙын,бурандар тымып,ҡар ирей башлағас барғандар.

**Бала:** Ҡар һыуы бик файҙалы тиҙәр,ысынмы өләсәй?

**Өләсәй:** Эйе, ҡар һыуы бик шифалы.Һыу ала торған урынды ололар алдан билдәләгән.Һыуҙы алып ҡайтҡас ҡатын-ҡыҙҙар унан сәй ҡайнатҡан,бит, сәс йыуған,әсәләр был һыу менән йәш балаларын ҡойондорғандар, был инде күҙ тейеүҙән һаҡлаған.Егеттәр барып һыу юлын тапай торһондар,ә беҙ йырлап-уйнап алайыҡ.

**Бала**: Егеттәр, һыу юлы яһайыҡ,ҡарҙы яҡшы итеп тапайыҡ.*(Малайҙар сығып китәләр)*

**Бала:** Ҡыҙҙар әйҙәгеҙ йырлашып алайыҡ.

### Йыр “Тамсы тама”

*Малайҙар килеп инә.*

**Бала**: Ҡыҙҙар юл тапалды,һыуға барырға була.

**Өләсәй:**Барығыҙ балалар,барығыҙ.

**Ҡыҙ**:Әйҙә өләсәй,һин дә беҙҙең менән бар,әсәйем дә барыр.

**Өләсәй**: Әйҙә улайһа бер йәшлеккә ҡайтҡандай булайым.

**Килен:** Әйҙәгеҙ ҡар һыуына бергәләшеп йырлашып барайыҡ.

**Түңәрәк уйыны “Йәмле яҙ апай килә”**

*Балалар ултырған урындарынан тороп артҡы планға сығалар.*

**Өләсәй**:Балалар күрәһегеҙме,ағайҙарығыҙ бынау ағасҡа ҡыҙыл таҫма таҡҡандар,тимәк ҡар һыуы алыр урын ошонда.

**Бала:**Ҡыҙҙар ҡарағыҙ, шишмә ағып ята.

**Ҡыҙҙар:** Ниндәй таҙа шишмә.

**Бала:** Мин ҡош ояһы күрәм!

**Өләсәй**: Шым,..шауламағыҙ,ҡурҡытып ҡуйма.

**Бала:** Килегеҙ әле яныма,мин умырзая күрәм.

**Килен:** Эйе матур.уны өҙөргә ярамай.

**Өләсәй:** Ҡарағыҙ әле тирә-яҡҡа ниндәй бейек тауҙар,бигерәк матур ҙа инде беҙҙең яҡтың тәбиғәте!

**Өләсәй**: Әйҙәгеҙ бер аҙ ял итеп алайыҡ,уйындар уйнағанығыҙҙы ситтән күҙәтеп ултырырға бик тә яратам,йәш саҡтар иҫкә төшә,күңелдәргә бик рәхәт булып китә.

**“Наза”уйыны.**

**Өләсәй:** Һай матур йырлайһығыҙ.Йәш саҡтарҙа беҙ ҙә шулай матур йырлай торғайныҡ.Ейәнсәрҙәрем әллә берегеҙ матур итеп “Урал батыр”эпосын һөйләп ишеттәрһегеҙме?

**“Урал батыр”эпосонан өҙөк.**

**Килен**: Һай афарин.Бик матур һөйләнегеҙ.Рәхмәт.

**Өләсәй:** Бер килгәндә халҡымдың һынамыштарын да барлайыҡ әле.Мин башын әйтәм,ә һеҙ аҙағын әйтегеҙ.

- *Яҙ ҡуҙғалаҡ күп булһа,йәй йылы килер.*
- *Ҡайын һуты күп булһа,йәй ямғырлы килә.*
- *Төтөн көйәнтәләп йыйылһа,көн йылына.*
- *Май айы һалҡын булһа,иген уңа.*
- *Сыйырсыҡ балалары сипылдаша башлағас,карабойҙай сәсәләр.*

**Өләсәй**: Һай афарин балалар.бигерәк күҙәтеүсән икәнһегеҙ.

**Бала**: Өләсәй мин йомаҡ та беләм.Ҡояйыммы?

**Өләсәй**:Әйҙә балам,ә беҙ яуабын табырбыҙ.

**Бала:** "Мин бында"-тип ниндәй сәскә

*Нурлана ҡар өҫтөндә,*

*Тик ғүмере ҡыҫҡа уның*

*Шиңә аҙна эсендә.(Умырзая)*

**Малай**:мин дә йомаҡ ҡояйым әле.

*Тау-тау булып өйөлдө*

*Яҙ килгәйне көйөндө*

*Йырғанаҡ булып аҡты*

*Шул ергә һеңде, батты(Ҡар)*

**Өләсәй:** Дөрөҫ,бигерәк белемле икәнһегеҙ балалар.Ярай инде,көн дә үтеп бара.Эй ғүмер,аҡҡан һыу менән бер ул.Ҡайтыр алдынан теләк теләп алайыҡ.*(Теләк теләгәндән һуң,бер бала таҫма алып бәйләй.)*

**Бала:***Донъялар имен торһон*

*Күк йөҙө аяҙ булһын!*

**Бала**:*Нурлы булһын илебеҙ*

*Сәскә атһын еребеҙ!*

**Бала:***Ерҙә һуғыш булмаһын*

*Ҡайғы еле ҡунмаһын!*

**Бала:***Сабыйҙар көлөп торһон*

*Ата-әсәле булһын!*

**Бала**:*Һау-сәләмәт булайыҡ*

*Имен-аман торайыҡ!*

**Бала**:*Таҙа булһын һыуыбыҙ*

*Сафлыҡ бөркһөн һауабыҙ!*

**Өләсәй**:*Яҙ көндәре нурлы булһын*

*Ҡар һыуҙары күберәк булһын!*

**Килен**: Ҡыҙҙар әйҙәгеҙ күнәктәрҙе ҡар һыуҙары менән тултырайыҡ.

**“Күнәктәр менән бейеү”**

*(Һыу янына баралар.бит-ҡулдарын йыуалар)*

**Өләсәй:** Күҙ теймәһен үҙегеҙгә

Бит-ҡулдарҙы йыуығыҙ

Шифаһы тейһен.

**Килен:** Яҙ көндәре нурлы булһын

Ҡар һыуҙары күберәк булһын

Йылғалары һыуға тулһын

Үләндәре күпереп торһон!

**Өләсәй:** Ярай рәхмәт,балалар!Теләктәрегеҙ ҡабул булһын!

**Килен:** Ҡыҙҙар һыуһатты,ҡайтып ҡар һыуына сәй ҡайнатып эсәйек,ҡоймағым да әҙер инде.

**Йыр “Яҙ килә”**

*Балалар төркөмгә ҡайталар,төркөмдә ҡоймаҡ менән сәй эсәләр.*